*Гүзәл БОРХАНОВА*

# Киләсәк талантлы йәштәр ҡулында

Әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендә йәш эшмәкәрҙәрҙе дәртләндереү маҡсатында һәм күренекле башҡорт шағиры Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 100 йыл тулыу айҡанлы Башҡортостан Республикаһы Министрҙар Кабинеты ҡарары менән 1995 йылда әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге иң абруйлы эшмәкәрҙәр, әҙәбиәтсе-ғалимдар, сәнғәт, театр һәм кино белгестәре, тәнҡитселәр араһынан Башҡортостан Республикаһы хөкүмәте эргәһендә комиссия төҙөлгәйне. Алты йылға бер һайланған ошо кәңәшселәр ҡоро бына нисә йыл инде даими эшләп килә. Ул үҙенең эшмәкәрлегендә Башҡортостан закондарына таянып, Ш.Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһы тураһындағы положениены булдырҙы һәм тәүге йылда уҡ, айырыуса лайыҡлы ижади йәштәрҙе һайлап алып, республика матбуғаты биттәрендә ҡабул ителгән эштәрҙең исемлеге, уның авторҙары, күрһәткән ойошмалары тураһындағы мәғлүмәттәр менән халыҡты таныштырҙы. Һөҙөмтәлә премияға дәғүә итеүселәрҙең эштәре киң һәм аныҡ тикшерелеп, йәмәғәтселек фекерҙәре һәм баһалары нигеҙендә, комиссияның премиялар тапшырыу тураһындағы ҡарары республика хөкүмәте ҡарары тарафынан раҫланғас, Тамара Искәндәрова «Нимә ул моң?» исемле шиғри йыйынтығы, ә Рәмил Ҡолдәүләт «Тышаулы өйөр» тигән драматик хикәйәте өсөн ошо оло исемгә лайыҡ булды. Йәш шағир Салауат Әбүзәровтың шиғри шәлкеме дәртләндереү призы менән билдәләнде.

Икенсе йыл Башҡортостандың опера һәм балет театры солисы Зөһрә Байбурина Кармен (Ж.Бизе, «Кармен»), Магдалена (Д.Верди, «Риголетто»), Яубикә (З.Исмәғилев, «Шәүрә»), Көнбикә (З.Исмәғилев, «Салауат Юлаев») партиялары өсөн, Фәрзәнә Аҡбулатова «Атай икмәге» исемле китабы һәм «Ҡорбанлыҡ йәки ябай ғына алыш-биреш», «Тәгәрмәсҡала йәки ер кендеге» тигән повестары, ә Рәйес Түләков «Ҡашмау» исемле шиғыр һәм поэмалар йыйынтығы өсөн лауреат дипломы алды. Улар менән бергә «Ант» төркөмөнән Алмаз Ғафаров, Рәмил Ихсанов «Ай, Уралым» музыкаль альбомы өсөн, скульптор Фирдант Нуриәхмәтов «Тәхет», «Тәхет. Н.Л.-ға арнау», «Композиция», «Мәңгелек менән мәңгелек араһында», «Туҡан Хатун» торсы, «Мөхәббәт колоннаһы», «Бишек йыры» тигән скульптуралар серияһы өсөн бүләкләнде. Хәтип Фазыловтың «Башҡорт далаһы», «Уйланыу», «Риүәйәт» тигән картиналар серияһы ла Ш.Бабич премияһын яуланы.

1997 йылда лауреаттар исемлеге тағы ла ишәйеп китте. Ләйсән Рәхмәтуллинаға «Флюидтар» триптихы һәм «Байкал буйлап» акварель сериялары өсөн ошо оло исем бирелһә, «Быяла юлсы» («Стеклянный пассажир») ҡыҫҡа метражлы нәфис фильмды төшөрөүсе бер төркөм йәштәргә — кинорежиссер Булат Йософов, сценарий авторы Айҙар Аҡманов, ҡуйыусы оператор Рияз Исхаҡов, рәссам Владислав Байрамғоловҡа ла лауреат булыу бәхете тейҙе.

Мостай Кәримдең «Салауат» трагедияһы буйынса ҡуйылған спектаклдә ҡатнашыусы Милли йәштәр театры актерҙары Рәсүл Ҡарабулатов (Салауат), Азат Йыһаншин (Имен), Фирҙәт Ғәлиев (Байыш) һәм Рушана Бабич (Ану) 1997 йыл лауреаттары исемлегенә теркәлделәр.

Халыҡ араһында танылыу тапҡан йәш архитектор, композитор, яҙыусы, шағир, рәссам, төрлө концерт, цирк һәм эстрада коллективтарына тәғәйенләнгән Ш.Бабич премияһы лауреаты исемлеге 1998 йылда ла бер төркөм талантлы ижади йәштәрҙең фамилиялары менән байыны. Был йылда Ринат Миңлебаев «Урман аллалары», «Гиперборен» тигән график эштәре серияһы, ә Әмир Мәжитов менән Йәмил Сөләймәнов «Оҙон юл» тигән берлектәге күргәҙмәләре өсөн юғары исемде яуланылар. Лауреат дипломын Тәнзилә Дәүләтбирҙина «Мин кем?» тигән шиғырҙар йыйынтығы өсөн алды.

Быйылғы Шәйехзада Бабич исемендәге Дәүләт республика йәштәр премияһы алыусылар исемлегендә сәхнә түрен матур бейеүҙәре менән байытыусы Рәйес Низаметдинов, халыҡ араһында ҡабатланмаҫ моңо менән дан алыусы композитор Юлай Үҙәнбаев, башҡорт балетын донъя кимәлендә данлаусы балерина Гүзәл Сөләймәнова, Рәсәй эстрадаһын яңыса балҡытыусы популяр йырсы Земфира Рамазанова ла бар.

Учалы районының Уральск ҡасабаһында йәшәгән Рәйес Низаметдиновтың «Ҡарас сәсән», «Бөркөт ояһы», «Мираҫ», «Сура батыр» кеүек халыҡҡа киң билдәле бейеүҙәре юғары баһаланды. Ә Сибай ҡалаһының Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге башҡорт драма театрында эшләгән Юлай

Үҙәнбаев, Зәйнәп Биишеваның «Тылсымлы ҡурай», Таңсулпан Ғарипованың «Төштәге йыр», Нәжип Асанбаевтың «Ҡыңғырау сәскә», Буранбай Искужиндың «Һуңғы аҡсарлаҡ» спектаклдәрен йырҙар менән биҙәүсе булараҡ, оло исемгә лайыҡ булды. Йыр-моң һөйөүселәргә ул «Аҡ болоттар», «Устарыма һал һин йөрәгеңде» исемле йырҙары менән таныш.

«Щелкунчик»та Мари, «Торна йыры»нда Зәйтүнгөл, «Дон Кихот»та Китри ролдәрен оҫта башҡарыусы Гүзәл Сөләймәнова үҙ-үҙенә талапсанлығы, физик һәм рухи әҙерлеклеге менән күптән инде лауреат булырға әҙер ине.

Земфира Рамазанова тыуған көнөндә, 26 августа, Өфө халҡын ҡыҙыҡлы һәм сағыу концерт программаһы менән ҡыуандырҙы һәм уға тап ошо көндө лауреат дипломы тапшырылды. Радио аша йырҙары көн һайын яңғырап тора, клиптары зәңгәр экрандарҙа күрһәтелә. «Ариведерчи», «СПИД» тигән йырҙарын йәштәр күтәреп алды.

Шөкөр, 35 йәшенә тиклем халыҡ араһында абруй ҡаҙанған, гүзәл хеҙмәт емештәре менән ҡыуандырған, ғорурландырған йәштәребеҙ йылдан-йыл ишәйә бара. Шәйехзада Бабич премияһының 27 июндә — Йәштәр көнөндә тапшырылыуы ла ҙур мәғәнәгә эйә. Тимәк, алдағы байрамдарға ла яңы хеҙмәт емештәре менән килергә тигән маҡсат ҡуйыла йәштәргә.

Әммә Шәйехзада Бабичтың барыһынан да бигерәк тапҡыр телле шағир, мәшһүр сатирик, оҫта музыкант һәм күпкә алдан күреүсе, үҙ дәүеренең иң йәш сәйәсмәне икәнлеген онотмайыҡ. Дөрөҫләктө ярып әйткән, Бабич традицияларын дауам итерлек шағирҙың үткер һүҙен, ярыштарҙа, бәйгеләрҙә һәм әйтештәрҙә ябай ер кешеләре, тыуған ил хаҡын күтәреүсе ялҡынлы шиғриәтте көтә Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр премияһы.



Коллаж Билаловой Г.